«Баш3ортостан Республика8ы К5й5рг92е районы муниципаль районыны4 Я3уп ауылы т5п д5й5м белем бире7 м9кт9бе» муниципаль бюджет д5й5м белем бире7 учреждение8ы



# Йырҙа йәшәү сере...

Башҡарҙы:  Килмәтова Алина Альберт ҡыҙы, 7 класс уҡыусыһы

Йөкмәтке

1. Инеш.Музыкаль мәҙәниәт.
2. Төп өлөш. Йырлы ғүмер.
3. Йомғаҡлау. Башҡортостандың мәҙәниәте һәм сәнғәте үҫешенә Ғ. Әлмөхәмәтов индергән өлөш
4. Ҡулланылған әҙәбиәт.

**Инеш.Музыкаль мәҙәниәт.**
Ҡурайсылар ҡурай, ай, уйнамаç,
Башҡорт ҡурайҙары булмаһа.
Егет кенә кеше йыр йырламаç,
Йөрәгендә дәрте булмаһа.

Халыҡтың барлыҡҡа килеүе лә, йәшәгән урыны ла, тарихы ла, донъяға ҡарашы ла мәҙәниәткә йоғонто яһай. Үҙенә генә хас мәҙәниәт, ҡабатланмаç ҡиммәттәр булдырыуға башҡорт халҡының элек-электән бөтөн шарты ла булған: донъяға фәлсәфәүи ҡарашы, матурлыҡты тойоу ҡеүәһе һәм уны матди сағылдыра белеүе, яҡшы кешене идеал итеп ҡуйған тәрбиәүи ҡанундары, тәбиғәттән айырылғыһыҙ рухи донъяһы, үҙенең тыуған ерен һәм рухи азатлығын һаҡларлыҡ сая яугирлығы, ижад маһирлығы, йыр-бейеүгә оçталығы һәм иң мөһим сифаттарҙың береһе — тәбиғәтте аңлай белеүе һәм камиллыҡҡа ынтылыуы, күңел азатлығын, намыçты бар нәмәнән иçтән ҡуйыуы кеүек сифаттар уның ижадына тәрән йоғонто яһай, төп йүнәлеш бирә.

Сәнғәт — матурлыҡ сығанағы ғына түгел. Ул көнкүреш, йәшәйеш өсөн мөһим булған шарт. Шуның өсөн дә рухи байлыҡ менән матди байлыҡ бер-береһе менән тығыҙ үрелеп бара. Әйтәйек, башҡорттар, башҡа халыҡтар кеүек үк, көнкүрештәге бар нәмәһен дә: кейем-һалымын да, һауыт- һабаһын да, йорт-ҡаралтыһын да матурлап биҙәгән. Был биҙәктәр, йыр сәнғәте кеүек үк, йөкмәткеһе яғынан күп яҡлы.

1938 йылдың 14 декабрендә Башҡорт дәүләт опера театры асыла. Опера театрының асылыуы башҡорт халҡы сәнғәтен һәм мәҙәниәтен үçтереүҙә ҙур тарихи ваҡиға була. Ул тәүге көндәрҙән башлап республика музыкаль мәҙәниәтенең үҙәгенә әйләнә. Республикабыҙҙың күп милләтле халҡы ошо театр аша рус һәм сит ил классикаһы өлгөләре менән таныша. Мәскәүҙең тәжрибәле белгестәре йәш башҡорт композиторҙарына баһалап бөткөһөҙ ҙур ярҙам күрһәтә. Аҙ ғына ваҡыт эсендә башҡорт операһы киң популярлыҡ яулай.

"Башҡорт халҡының һәр боронғо көйөн операға нигеҙ итеп була. Опералар яҙырға кәрәк", — тип хыялланған үҙ заманында композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов. Сәжәйеп ҡатмарлы музыкаль әçәр һаналған, әммә халыҡ-ара музыка донъяһында иң юғары үçеш тип баһаланған опера яҙып, халҡыбыҙҙың боронғо йырҙарын донъя кимәленә сығарыу хыялы менән яна Ғәзиз Әлмөхәмәтов, һәм башҡорт композиторҙары араһында (мҙюнсе булып ошо эшкә тотона. Иң тәүге һынау эше булғанлыҡтан, татар композиторҙары менән бергәләшеп ипләйҙәр, һәм ике халыҡ өсөн уртаҡ булған "Сания” һәм "Эшсе" опералары тыуа.

Композитор Мәсәлим Вәлиевтең "һаҡмар" операһы (Сәғит Мифтахов либреттоһы) беренсе башҡорт операһы тип һанала. 1940 йылдың 8 февралендә был операның премьераһы була һәм ошо көн башҡорт милли операһының тыуыу көнө тип атала.

Мәсәлим Вәлиев операла, нигеҙҙә, халыҡ көйҙәрен файҙаланған. Операны йылы ҡаршылайҙар. Хатта хор оеөн яҙылған "Аҡ ҡайын" йыры аҙаҡ халыҡ араһында киң тарала һәм айырым йыр булып китә.

1943 йылда йәш шағир Мөхәмәтйәров Хәй (М. Хәй), Сәғит Мифтахов либреттоһын "Айһылыу" исеме менән үҙгәртә лә Мәскәү композиторы Н. Пейко ҡатнашлығында яңынан музыка яҙыла. 1953 йылда шағир Ғәйнан Әмири либреттоны яңыртып яҙа һәм музыкаһы ла үҙгәртелә.

"Ҡарлуғас" операһының либреттоһын Баязит Бикбай үҙ әҫәре нигеҙендә яҙа. Музыкаһы Н. Чемберджи- ныҡы. Премьераһы Бөйөк Ватан һуғышы башланған йылда, 1941 йылдың 20 сентябрендә була.

Композиторҙар Антонио Спадавеккиа менән Халиҡ Займов шағир Сәғит Мифтахов либреттоһына "Аҡбуҙат" операһы яҙалар. Халыҡ эпосы нигеҙендә яҙылған патриотик рухтағы был опера 1942 йылдың 7 ноябрендә ҡуйыла һәм йылы ҡаршы алына. Был операларҙың бөтөнөһөндә лә башҡорт халыҡ йырҙарының сағылышы ныҡ һиҙелә. Тимәк, башҡорт халҡының оҙон көйҙәре һәр береһе операға нигеҙ була ала, тигән фекерҙең дөрөҫлөгө иҫбатлана.

Башҡорт операһының артабанғы үҫешендә лә шулай уҡ халыҡ йырҙары ныҡ файҙаланыла. "Салауат Юлаев", "Аҡмулла", "Ҡаһым түрә", "Нәркәс" опералары, тәүге операларҙың хаталарын иҫәпкә алып, яңыса һулыш, заманса талаптар нигеҙендә уңышлы ижад ителә. Фольклор-этнографик күренештәр, йолалар, туй байрамдары, күмәк уйындар, сәхнәләштерелгән легендалар — барыһы ла профессиональ театр сәнғәтенең нигеҙен тәшкил итә. Шулай итеп, башҡорт операһы үҙенең формалашыуында халыҡтың музыкаль ижадына, рус классик музыкаль традицияларына һәм хәҙерге заман сәнғәт тәжрибәһенә таяна.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры III мең йыллыҡта юғары профессиональ күтәренкелек кисерә. Заһир Исмәғилевтең "Ҡаһым түрә" операһы уңыш менән бара. Салауат Низаметдиновтың "Мементо" операһын да тамашасылар яратып ҡабул итә. Йырсылар Асҡар һәм Илдар Абдразаҡовтарҙың исеме киң танылыу таба. Талантлы балерина Гүзәл Сөләймәнова Будапештта үткән Рудольф Нуриев исемендәге халыҡ-ара конкурс дипломанты була, Гөлсинә Мәүлекасованың балеттағы уңышы республика тамашасыларын шатландыра. Балет артистарын сит илдәргә даими саҡырып торалар.

Октябрь социалистик революцияһынан һуң 1920 йылдарҙа халыҡ сәнғәте йәнләнә башлай. Күп кеше ҡатнашҡан митингыларммы, йыйылыштармы, — ни генә ойошторолмаһын, аҙаҡтан концерттар ҡуйыла. Бындай концерттарҙа халыҡ араһынан сыҡҡан таланттар ғына түгел, хатта уға тиклем төрлө түңәрәктәрҙә, төркөмдәрҙә сығыш яһап йөрөгән, ҡайҙалыр белем алған профессиональ артистар ҙа әүҙем сығыш яһай башлай. Бындай сығыштар ваҡытында халыҡ араһында йырға-бейеүгә маһир һәләттәр табыла, улар профессиональ төркөмдәргә эшкә алына. Халыҡ сәнғәтен өйрәнеү, йыйыу-туплау, тәртипкә килтереү, ғилми күҙлектән тикшереү өсөн Башҡортостандың көнкүреш, тарих һәм мәҙәниәтте өйрәнеү йәмғиәте эргәһендә сәнғәтте өйрәнеү секцияһы ойошторола. Унда музыка белгестәре һәм композиторҙар И. Салтыков, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Солтан Ғәбәши, Александр Ключаревтар инә. Улар башҡорт музыкаль фольклорын ойрәнеүҙә һәм профессиональ музыкаға нигеҙ һалыуҙа ҙур өлөш индерә.

1919 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында Башҡорт дәүләт драма театры эргәһендә оркестр ойошторола. Был оркестр менән һәүәҫкәр композитор Хәбибулла

Ибраһимов етәкселек итә. Спектаклдәрҙе музыкаль яҡтан биҙәү, музыканы ноталарға күсереү кеүек профессиональ әҙерлек талап иткән эшмәкәрлек башлана. Шуға ла, профессиональ музыканың формалашыуы ына ошо бәләкәй генә оркестр ҙур йоғонто яһаған, тиһәк, һис кенә лә яңылыш булмаç. Әлбиттә, музыкаль яҡтан биҙәү өсөн халыҡ йырҙары, бейеү көйҙәре ныҡ файҙаланыла. Мәçәлән, Хәбибулла Ибраһимовтың, Мөхәмәтша Буранғоловтың пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәр халыҡ йырҙарына нигеҙләнә.

1929 йылда йәш композитор Камил Рәхимов "Башҡорт туйы"на яңылыҡ өçтәй, әçәрҙең йөкмәткеһен нығыраҡ асыу, образдарҙы баҙыҡландырыу маҡсатында спектакль өсөн махсус ижад иткән музыкаль әçәрҙәр индерә.

1919 йылда Өфөлә — музыка мәктәбе, 1921 йылда музыка училищеһы асыла. 1926 йылда сәнғәт техникумы эшләй башлай, һәм 1932 йылда ул музыка училищеһына әйләнә. Унда театр һәм художество бүлектәре була. Был бүлектәргә йәштәрҙе республиканың райондарынан эҙләп йөрөп йыялар, улар үҙҙәре лә килә. Һәләтле тип табылғандарҙы һис бер ҡаршылыҡһыҙ алыр булғандар һәм яңылышмағандар, сөнки артабан улар үҙҙәрен ысын талант эйәһе итеп күрһәтеп, профессиональ музыканы үçтереүгә тос өлөш индерәләр.

1928 йылда Өфөлә Башҡорт радиокомитеты ойошторола. Халыҡтың аң-белемен күтәреүҙә уның роле баһалап бөткөһөҙ. Ауылдарҙа, ғәҙәттә, бер нисә кешелә генә була торған радиоалғыстар янына тотош ауыл халҡы йыйылып, Өфө тапшырыуҙарын тыңлай, һәр яңы йыр, һәр яңы көй шунда уҡ отоп алынып һәм халыҡ араһында таралыр булған. Радиокомитетта фонотека булдырыла һәм унда яҙмалар туплана башлай.

Бөгөнгө көндәге иç китмәле бай фонотеканы туплауҙа радиокомитеттың оҙаҡ йылдар эшләгән тәүге музыка редакторҙарынан Александр Ключарев, Камил Рәхимов, Шәүкәт Мәсәғүтов менән Мәрйәм Ғабдрахманованың, Фәниә Хәлитова-Сөләймәнованың роле баһалап бөткөһөҙ ҙур. Ғөмүмән, радиокомитеттың туплау, ойоштороу йәһәтенән роле иç китмәле була. Комитет эргәһендә республикала беренсе ижади коллективтар туплана: инструменталь һәм вокал коллективтар, Анатолий Тихомиров етәкселегендә йырсылар хоры, А. Спиваковский етәкселегендә симфоник оркестр ҙа эшләп ала. Ошо коллективтар өсөн тәүге әçәрҙәр яҙыла, башҡорт халыҡ йырҙары ноталарға һалына. Башҡорт автономиялы республикаһының 10 йыллығына композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов "Тантаналы марш" ижад итә, симфоник оркестр өсөн "Сыңрау торна", "Каруанһарай" йырҙары эшкәртелә.

Башҡорт композиторҙары Мәсәлим Вәлиев, Хәбибулла Ибраһимов, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Солтан Ғәбәши, Камил Рәхимовтар 1920 йылдарҙа уҡ көй яҙа, башҡорт халыҡ көйҙәрен йыйып өйрәнә башлай. Тап ошо композиторҙар башҡорт профессиональ музыкаһына нигеҙ һала ла инде.

**Йырлы ғүмер.**
Йырһыҙ ҙа ғына йәшәүҙең йәме юҡ,
Йырлап йәшәүҙәре бер ғүмер
Башҡорт халҡының йыр-моң донъяһында, милләтебеҙҙең рухи үҫеш тарихында бихисап ҡәҙерле исемдәр бар. Шул исемдәр араһында Ғәзиз Әлмөхәмәтов йондоҙо айырыуса яҡты һәм сағыу булып, илебеҙ һәм күңелдәребеҙ киңлегендә балҡып тора. Беҙҙең рухиәтебеҙҙә уның урыны иң элек, әлбиттә, башҡорттоң кешелек донъяһында тиңе булмаған илаһи йыр-моңдарының ҡабатланмаҫ бөйөк оҫтаһы һынында, дәүерҙәрҙе иңләп, ҡалҡып тора. Эйе, ул ысын мәғәнәһендә башҡорт йырының ҡаһарманы, башҡорт моңоноң даһийы, мәғрур Уралдың XX быуаттағы йырсы Буранбайы. Шуның менән бергә ул, әлбиттә, милли музыка тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдырған композитор, ба шҡорт профессиональ сәнғәтен башлап ебәреүгә ғәйәт ҙур өлөш индергән, уның н игеҙ таштарын һалыуҙа баһалап бөткөһөҙ хеҙмәт күрһәткән арҙаҡлы бер эшмәкәр. Йәнә әйтеп үтәйем: беҙҙең быуынға, беҙҙең дәүергә Ғәзиз Әлмөхәмәтов тигән исем алыҫалыҫтан, таш зиндандарҙың биктәре һәм сиктәре аша йөрәктәрҙе тетрәтерлек моң булып килеп етте. Был һоҡланғыс шәхестураһында иҫтәлектәр тыйылыуҙарға ҡарамаҫтан, һоҡланғыс легендаға әйләнгән.
Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов 1895 йылдың 20 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙер Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы) Мораптал исемле (хәҙерге Иҫке Мораптал) башҡорт ауылында донъяға килгән. Ғаиләлә алты малай үҫә: Абдулла, Абдрахман, Ғәзиз, Фәтих, Ғәлирахман, Хәйбрахман. «Ғәзиздең әсәһе Ғәлимә бик моңло тауышлы ине. Уның «Мөхәммәҙиә»не һәм башҡа дини китаптарҙы уҡыуы хәтеремдә. Ғәзизгә тауыш матурлығы әсәһе тарафынан бирелгәндер», — тип яҙа йырсының ҡатыны Мәстүрә Әлмөхәмәтова. Ғаилә фотоларының береһендә Ғәзиздең әсәһе Ғәлимә апайҙың һөйкөмлө, һоҡланғыс, эске бер нур бөркөп торған күркәм йөҙөн күреп, таң ҡалаһың. Ғәзиз үҙенең төҫө, холҡо менән дә әсәһенә тартым булғандыр, күрәһең. Мәстүрә ханым уның портретын: «Урта буйлы, киң яурынлы, ҡуңыр сәсле, көләс йөҙлө кеше ине», — тип һүрәтләй. Ә бына ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова-Латипованың иҫтәлеге: «Атайым һәйбәт холоҡло, туған йәнле, кешелекле кеше ине. Ярлы башҡорт ғаиләһендә тыуып үҫкән. Туғандарына ғүмере буйына ярҙам итте. Абдулла ағайға ай һайын аҡса ебәреп торҙо, ул сирле генә кеше ине. Хәйбрахманды 1922 йылда үҙе менән алып китә, ул беҙҙең ғаиләлә үҫте. Абдрахман ағайҙың ете балаһы булды, Рауза исемле ҡыҙы беҙҙә ҙурайҙы, хәҙер Ташкентта йәшәй. Ул минән өс йәшкә олораҡ ине, беҙгә кейемде лә бер иштән тегеп кейҙерәләр, игеҙәктәр кеүек йөрөнөк. Ғәли ағайҙы ла уҡытты атайым. Фәтих ағайҙы, сирләгәс, шифаханаға ебәрҙе. Шулай итеп, барлыҡ туғандары хаҡында ла хәстәрлек күрә ине. Өләсәйҙе (Ғәлимә әбейем) ихтирам итте, беҙгә килһә, матур итеп кейендерер ине».
Ғәзиз тыуған ауылда ете йәштән мал ҡарап, ата-әсәһенә бесән, ураҡ эштәрендә ярҙамлашып үҫә. Әммә уға ата йортонан бик иртә сығып китергә тура килә. 1909 йылда Ғәзиздең өлкән ағаһы Абдрахман, бәхет эҙләп, Ташкентҡа сығып китергә ҡарар итә. Ғәзиз уның менән бергә китмәксе була. Әсә кешегә нисек кенә ауыр булмаһын, ризалығын бирмәйенсә сара ҡалмай — ғаиләләге алты баланың тамағын нисек туйҙырмаҡ кәрәк. Шулай итеп, Ғәзиз ун дүрт кенә

йәшлек үҫмер сағынан үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫа. Ғәзиз йәйҙәрен ағаһы менән ялланып йөҙөм баҡсаларында эшләй, ҡышҡы осорҙа мәҙрәсәлә уҡый. Әйткәндәй, Ташкентҡа барып йәшәй башлаған тәүге йылда уҡ ул йәштәр, йыр һөйөүсе яҡташтары араһында башҡорт йырҙарын бик моңло итеп башҡарыуы менән ныҡлы танылып өлгөрә. Был хаҡта Троицкиҙа сыҡҡан «Аҡмулла» журналының хәбәрсеһе М. Бөдәйле бик ҡыҙыҡлы хәтирәләр яҙып ҡалдыра. Ташкенттың бай бер сауҙагәре үҙенең баҡсаһында бер мәлде байрам ойоштора. Бына шунда ҡунаҡтарға самауыр ҡуйып, байға хеҙмәт итеп йөрөгән ун дүрт йәшлек ҡаҡса ғына башҡорт малайының үҙ алдына «Ҡуңыр буға» көйөнә йырлауын ишетеп, ғәжәпкә ҡала. Йырсыны осратып, ниндәй йырҙар йырлауы, ҡайҙа йырларға өйрәнеүе тураһында һорауҙар бирә. «Ҡунаҡтар дастарханға йыйылғас, мин Ғәзиздең йырлауын тыңларға тәкдим иттем, – , ти М. Бөдәйле. — Ул беҙгә үҙенең халҡының йырҙары «Ҡолой кантон»ды, «Һаҡмар»ҙы, «Шәүрә»не йырлап күрһәтте. Уның һандуғас тауышындай моңло йыры һәр кемдең күңел түренә үтеп инде»…

Ун һигеҙ йәшенә тиклем Ғәзиз шулай йәйҙәрен эшләп, ҡыштарын уҡып, Ташкентта йәшәй. Йыр, әлбиттә, уның иң тоғро юлдашына әйләнә. Тыуған яғын, Башҡортостанды һағынған саҡтарында башҡорт йырҙары уның йәненә, йөрәгенә үҙе бер дауа була. Ғәзиздең тауышы ла үҙгәрә. «Малай саҡтағы яңғырауыҡлы альт көслө, сағыу һәм шул уҡ ваҡытта йомшаҡ тенорға әйләнә», — тип билдәләй музыка белгесе Л.П. Атанова. Бына ошо көслө, сағыу һәм тетрәндергес милли моң менән яңғыраған был илаһи тауыш артабан меңәрләгән кешеләрҙең күңелен яулай — Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың йыраусылыҡ сәнғәте ысын-ысынында оҙон көйлө башҡорт йырҙарын башҡарыуҙың эталонына әйләнә. Ташкентта ул «Шишмә» исемле татар-башҡорт йәштәр клубы ойошторған концерттарҙа сығыш яһай. 1914 йылдан иһә 19 йәшлек йырсы егет үҙ аллы концерт эшмәкәрлеген башлай, Урта Азия ҡалаларында – шул уҡ Ташкентта, йәнә Бохарала, Сәмәрҡәндтә, Кокандта сығыш яһай, гастролдәр менән Башҡортостанға ҡайта, Татарстанға бара. Үзбәкстанда йәшәгән йылдарында үзбәк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ халыҡ моңдары менән таныша. Артабан ул, әлбиттә, рус музыкаһын, бөйөк рус йырсыларының башҡарыу оҫталығын да ихлас өйрәнәсәк, һәр ваҡыт үҙенең белемен камиллаштырыу, ижади фекерләүен киңәйтеү өҫтөндә эшләйәсәк. «Әммә, төрлө халыҡтарҙың йыр-моңон тыңлап, уларҙың үҙенсәлекле мәҙәниәтен үҙенә һеңдерә барып, Ғәзиз Әлмөхәмәтов үҙен иң элек башҡорт йырсыһы итеп тоя. Бәлки, үҫмер йәшенән йәненә тынғы бирмәгән тыуған ерҙе һағыныу хисе Ғәзиздә тыуған моңдарға ҡарата айырыуса мөхәббәт тойғоһо уяҡкандыр... Уның талантын баһалаусылар йырсының вокаль оҫталығына — тын алышының киңлегенә, тауыш күркәмлегенә, фразировканың нескәлегенә таң ҡала. Ғәзизгә йыш ҡына, ҡайҙа уҡының, кемдән өйрәндең, тип һорау бирәләр. «Мин үҙ туған халҡымдан йырларға өйрәндем», — тип яуап биргән ул»

Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың биографияһында 1917-1918 йылдарҙа Шәйехзада Бабич менән бергә Өфөлә, Ырымбурҙа тамашалар ойоштороуы, башҡорт моңоноң һәм башҡорт шиғриәтенең был ике бөйөк эшмәкәренең ижади хеҙмәттәшлеге айырыуса әһәмиәт ҡаҙана. Дөрөҫ, Ш. Бабич менән Ғ.

Әлмөхәмәтов бынан алдараҡ уҡ таныш булғандар, тип иҫәпләргә урын бар. Мәҫәлән, «Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр» китабында урынлаштырылған фотола бер төркөм милли интеллигенция вәкилдәре араһында алғы рәттә Ш. Бабич менән Ғ. Әлмөхәмәтовты күрәбеҙ. Әгәр ҙә датаһы дөрөҫ билдәләнгән булһа, фотоның аҫтындағы текст иғтибарҙы йәлеп итә. Унда: «1916 йылдың йәйендә Өфөлә» 3 , — тип яҙылған. Ә бына шул уҡ йыйынтыҡта Сәйфи Ҡудаш үҙенең иҫтәлектәренән «Ике талант» тигән бүлексәһендә (китаптың 124-се бите) Ғ. Әлмөхәмәтовтың 1917 йылдың июлендә Өфөлә Ш. Бабич менән бергә үткәргән концерттары тураһында шаҡтай ентекле итеп яҙып ҡалдырған.
«Өфөгә ҡайтҡас, Бабич бик күп яҙҙы һәм кисәләрҙә бик күп сығыштар яһаны. Ошо бер-бер артлы үтеп торған концерттарҙың алҡыштары тынып та өлгөрмәгән ине әле. Ырымбурҙан йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов килеп төштө һәм концерт бирергә әҙерлек күрә башланы. Күп тә үтмәне, Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Бабичтың 25 июлдә концерты буласағын белдереп, Өфө урамдарында афишалар барлыҡҡа килде». С. Ҡудаштың атаҡлы шағир менән йырсының бергә сығыш яһаған ошо концерты хаҡындағы тәьҫораттары ла ғәйәт ҡыҙыҡлы. «Әгәр ҙә Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Бабич һәр ҡайһыһы айырым-айырым ғына кисә үткәрһә, минеңсә, улар, бына шулай бергәләшеп яһалған концерттарҙағы кеүек, ҙур уңышҡа өлгәшә алмаған булырҙар ине. Сөнки талантлы йырсы менән талантлы шағир икәүләшеп концерт биргән саҡта тыңлаусыларҙың түбәләре күккә тейә. Улар бер-береһен тулыландыра, бер-береһенә үҙенең матурлығын өҫтәй ине. Мәҫәлән, Ғәзиздең йырынан һуң сәхнәлә бер аҙ моң болоттары ҡуйырып ҡала. Шаян тәбиғәтле Бабич сәхнәгә кинәт килеп бәргән өйөрмә һымаҡ булып сыға ла үҙенең көлкөләре менән шул болоттарҙы бик тиҙ таратып ебәрә. Йәки ул бөтөнләй киреһенсә була. Бабич артыҡ ныҡ көлдөрөүҙән бер ни тиклем тарҡауланыбыраҡ, ғәмһеҙләнеберәк киткән күңелдәрҙе Ғәзиз, сығып, үҙенең моңһоу йырҙары менән һиҫкәндереп һәм нәфисләндереп ебәрә ине».
«Шул кисәнән һуң, — ти С. Ҡудаш, — Бабич, Ғәзиз Әлмөхәмәтов һәм «Ҡармаҡ» журналын сығарыусыларҙың береһе булған Дәминев Мәскәүгә киттеләр». Мәскәүҙә улар йәнә берлектәге концерт программаһы менән сығыш яһарға йыйынған булалар. Ошонан һуң Бабич, билдәле булыуынса, «Ҡармаҡ» журналы мөхәрриренең саҡырыуы буйынса Ырымбурға юллана.
1917 йылдың ҡышында, Октябрь революцияһынын һуңғы көндәрҙә, Ғәзиз Әлмөхәмәтов Ырымбурҙың данлыҡлы Башҡорт халыҡ йорто Каруанһарай бинаһында, һалдаттар йәшәгән казармаларҙа Исмәғил Һилалов тигән атаҡлы татар мандолинсы музыканты менән бергә концерттар бирә. 1918 йылда беҙ уны йәнә Бабич менән бергә Ырымбур сәхнәләрендә күрәбеҙ. «1918 йылдың йәйендә Ырымбурҙың ҡала театры бинаһында Ғәзиз концерт номерҙары менән сығыш яһай, — тип яҙа Л.П. Атанова. — Концертты Шәйехзада Бабич алып бара. Тыңлаусылар уларҙы башҡорт йырсыһы һәм шағирының оҫталығы һәм таланты менән һоҡланып, Бабичтың үткер һүҙенә һәм Ғәзиздең илһамлы йырына берҙәй үк таң ҡалып, оҙон кис буйы сәхнәнән төшөрмәйҙәр»
Ә бынан саҡ ҡына алдараҡ, 1918 йылдың 17 февралендә Ырымбурҙа, Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғандан һуң, Башҡортостандың Ваҡытлы Революцион Советы ойошторола һәм башта уның составына Ғ.С. Әлмөхәмәтов

та индерелә. Әммә ул, сәйәси эшкә әҙерлеге етмәүгә һәм дәүерҙең ҡатмарлы хәлдәрен аңлап бөтмәүенә һылтанып, БВРС составынан сығарыуҙарын һорай. БВРС унын үтенесен ҡәнәғәтләндерә һәм, йырсыға стипендия тәғәйенләп, Ырымбур музыка училищеһында уҡырға направление бирә. Бынан һуң сәйәси ваҡиғаларҙың ҡырҡа борололоштары арҡаһында Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ул уҡыу йортонда, моғайын, уҡырға тура килмәгәндер. Ләкин был мәғлүмәттәр шул яғы менән әһәмиәтле: Ғәзиз Әлмөхәмәтов, күренеүенсә, 1917—1918 йылдарҙа йә күпселеген Ырымбурҙа йәшәгән, йә, Ташкенттан бөтөнләй үк күсеп ҡайтмаған булһа ла, күп ваҡытын Ырымбурҙа, асылда үҙенең тыуған яҡтарында үткәргән. Унын 1919 -1920 йылдарҙа Исмәғил Һилалов менән бергә «Өфө тирәһендә концерттар ҡуйып уҙҙырыуы» тураһындағы мәғлүмәт тә бар.

Хәйер, был ваҡытта инде ул бөтөн Рәсәй күләмендә, барлыҡ төрки халыҡтары ара һында киң танылған популяр йырсы булып етешә. Ошо уҡ осорҙа ул үҙе лә йырҙар ижад итә башлай.

Башҡортостанда беренсе донъя һәм граждандар һуғышы килтергән ҡайғы һәм аһ-зарҙарҙы, аҡтарҙың һәм ҡыҙылдарҙың башҡорт халҡына ҡарата ҡылған рәхимһеҙлек һәм яуызлыҡтарын күреп, унын күңелендә ошо хаҡта йыр, моң теле менән һөйләп биреү теләге тыуа. Тиҙҙән шағирә С. Биксурина һүҙҙәренә «Шомло ел» исемле матәм йыры — тәрән трагизм тойғоһо менән һуғарылған баллада ижад итә. Был әҫәрҙе музыка белгестәре юғары баһалай, ул йырсының репертуарында ныҡлы урын ала.

1920 йылда Баҡылағы гастролдәре ваҡытында Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа әзербайжан театрында музыкаль спектаклдә ҡатнашырға тәҡдим итәләр. Музыка белгестәренең фекеренсә, ошо ваҡиға йырсының күңелендә үҙебеҙҙә милли опера тыуҙырыу хыялын тыуҙыра. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тормош юлында артабан нәҡ шул идея иң мөһим, иң мөҡәддәс ижади маҡсатҡа әйләнә. Ташкентҡа ҡайтыу менән ул, башҡорт һәм татар көйҙәренә нигеҙләнеп, «Сания» тигән операның либреттоһын һәм музыкаһын яҙыу эшенә тотона. Операның беренсе картинаһын хатта һәүәҫкәр артистар үҙешмәкәрлек сәхнәһендә уйнап та күрһәтәләр. Әммә был башланғыс әлегә ысын мәғәнәһендә опера жанрынан бик йыраҡ тора. «Был төҙөк музыкаль әҫәр түгел, ә музыкаға ҡоролған пьеса» , — тиеүе менән Ю.Н. Иҫәнбәт хаҡлылыр, моғайын. Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ысын мәғәнәһендә опера һымаҡ ҡатмарлы жанрҙа эшләү өсөн белем дә, тәжрибә лә етмәй әле. Шуның өсөн дә 1922 йылдың башында бергәләп опера яҙыу тәҡдиме менән Солтан Ғәбәшигә мөрәжәғәт итә. Ошо уҡ йылда ул, Ташкенттағы дуҫтарының кәңәшен тотоп, бергәләп опера өҫтөндә эшләү хыялы менән, Ҡазанға күсеп килә. Бер йылдан һуң Солтан Ғәбәши унын инициативаһын тулыһынса хуплай һәм өсөнсөгә Василий Виноградов менән ижади хеҙмәттәшлек урынлаштырыу хаҡында тәҡдим индерә. 1923 йылдың икенсе яртыһында улар өсәүләп эшкә тотоналар. 1924 йылдың яҙында Ғәзиз Әлмөхәмәтов менән Солтан Ғәбәши, эште дауам итер өсөн, Башҡортостандың ул саҡтағы Арғаяш кантоны (хәҙер Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы) Яңы Субыл ауылына ҡымыҙ дауаханаһына китәләр. Бында улар көндөҙ ижад итәләр, кистәрен ял итеүселәр менән аралашып үткәрәләр. Ауылда уларға башҡорт туйын күреп, башҡорт туй йолаһы менән яҡындан танышырға насип була. Яңы

Субылда ике ай буйы эшләп һәм ял итеп, операның күпселек өлөшөн яҙып бөтөп ҡайталар .
«Сания» операһы 1925 йылдың июненә тамамлана, ул тәү башлап Татарстан АССР-ының 5 йыллыҡ юбиллейын байрам иткән көндәрҙә сәхнәгә сығарыла. Шуны ла әйтергә кәрәк, татар матбуғаты һәм татар белгестәре «Сания» әҫәрен бер тауыштан фәҡәт татар операһы тип кенә атарға ғәҙәтләнгәндәр. Әммә «Сания» иң элек башҡорт ерлегенә, башҡорт донъяһына яҡын булыуын инҡар итеп буламы? Уның музыкаһы башҡорт йыр һәм көйҙәренә нигеҙләнгән, уны ижад итеү башланғысы башҡорт йырсыһының эшмәкәрлеге менән бәйле. Унда беҙҙең бөйөк йырсыбыҙҙың да йөрәк моңо һалынған. Опера спектаклендә премьерала төп партияны ла ул башҡарған. Шулай булғас, башҡорт операһының да башланғысы ошо әҫәргә барып тоташа тип иҫәпләү урынлы түгелме? Был хаҡта башҡорт музыка белгестәре үҙҙәренең фекерен әйтергә тейештәр. «Сания» операһының уңышы менән ҡанатланып, Ғ. Әлмөхәмәтов, С. Ғәбәши һәм В. Виноградов М. Ғафури либреттоһына «Эшсе» операһын яҙырға тотоналар. Опера 1930 йылда Мәскәүҙә милли театрҙар олимпиадаһында күрһәтелә һәм татар профессиональ музыкаһы үҫешендә ҙур ваҡиға булараҡ баһалана. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың Ҡазанда йәшәгән йылдары концерт-башҡарыу йәһәтенән дә емешле була. Был дәүерҙәге афишаларҙан, белдереүҙәрҙән, рецензияларҙан күренеүенсә , ул Ҡазанда күренекле татар йырсылары һәм музыканттары менән бергә сығыш яһай, элеккесә, Мәскәүҙә, Ташкентта, Ленинградта гастролдәрҙә йөрөй. Афишалар ғәҙәттә уның менән «Башҡорт халыҡ йырсыһы Ғәзиз Әлмөхәмәтов», «Атаҡлы башҡорт йырсыһы», «Башҡортостандың халыҡ йырсыһы», «Башҡортостандың рәсми халыҡ йырсыһы» тип таныштыра. 1927 йылдың ғинуар-февраль айҙарында Ғәзиз Әлмөхәмәтов һәм виртуоз мандолинсы Исмәғил Һилалов Өфө, Троицк, Ҡустанай, Свердловск (хәҙер Екатеринбург) ҡалаларына оҙайлы гастролгә сыға. Ыңғайҙа Арғаяшта туҡтап, бер генә концерт ҡуйып китәләр. Ғәзиз Әлмөхәмәтов репертуарында төп урынды боронғо башҡорт халыҡ йырҙары алып тора: «Урал», «Зөлхизә», «Таштуғай», «Буранбай», «Ялан Йәркәй», «Сибай кантон», «Ҡолой кантон», «Шәүрәкәй», «Арғужа», «Эскадрон», «Һаҡмар», «Һандуғас», «Ҡуңыр буға», «Миңлебикә», «Ирәндек», «Байыҡ» — башҡорт халҡының йыр-моң классикаһының был аҫыл өлгөләре Ғәзиз Әлмөхәмәтов башҡарыуында кемде генә әсир итмәгән! Ул шулай уҡ «Сания» операһынан Зыя арияһын, Хәбибулла Ғәбитовтың «Ынйыҡай менән Юлдыҡай» драмаһына яҙылған йырҙарын, үҙе яҙған «Шомло ел», «Сайҡалалар кәмәләр», «Ағиҙел ярында», «Йырҙар яҙам», «Көтөүсе», Сәлих Сәйҙәшевтең «Монтерҙар йыры»н, Мәсәлим Вәлиевтең «Аҡ ҡайын»ын, Хәбибулла Ибраһимовтың «Салауат маршы»н, аҙағыраҡ «Эшсе» операһынан Ниғмәт арияһын ҙур дәрт, илһам, оҫталыҡ менән башҡара. Ҡазанда 1928, 1929 йылдарҙа В.И. Виноградов уның башҡарыуы буйынса «Байыҡ», «Зөлхизә», «Халҡым өсөн», «Шәүрәкәй», «Ҡаһым түрә», «Сибай кантон», «Ҡолой кантон», «Таштуғай», «Арғужа» исемле башҡорт халыҡ йырҙарын һәм ноталарын баҫтырып сығара.
1929 йылда, Башҡорт АССРының ун йыллыҡ юбилейына арнап, Ғ. Әлмөхәмәтов, С. Ғәбәши һәм В. Виноградов «Башҡортостан маршы»н яҙалар.
Марш тантаналы кисәлә тынлы оркестр тарафынан башҡарыла. Сәхнәлә тәүге

тапҡыр оркестрҙа башҡорт музыкаһы яңғырай! Советтарҙың VII Бөтөн Башҡортостан съезы Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа халыҡ артисы исемен бирергә һәм уның үҙен Башҡортостанға ҡайтарырға тигән ҡарар сығара. Ошо ваҡиғанан һуң бөйөк йырсы Өфөгә күсенеп ҡайта.
1929—1937 йылдар Ғәзиз Әлмөхәмәтов ижадының һәм эшмәкәрлегенең өр-яңы һәм айырыуса емешле осорона әйләнә. Ул, әлбиттә, концерт эшмәкәрлеген дауам итә, алыҫ гастролдәрҙә йөрөп ҡайта. Башҡорт ауылдарында йыр-көйҙәребеҙҙе йыйыу, фольклор материалдарын туплау эше менән шөғөлләнә. Йәй һайын тыуған төйәгенә ҡайтып, туғандарын, яҡташтарын йыр-моңдары менән һөйөндөрөп китә. Алыҫ ауылдарҙа талантлы башҡорт йәштәрен табып, уҡырға урынлаштыра.
Ниһайәт, ул илдә беренсе булып 1932 йылда Мәскәү дәүләт консерваторияһында милли студия астырыуға өлгәшә. Башҡорт студияһында уҡып сыҡҡан йырсылар, композиторҙар — Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Баныу Вәлиева, Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Рәйеф Ғәбитов һ.б. — профессиональ башҡорт сәнғәтенең төп көстәренә әйләнә. Ошо быуын йырсылары яуаплы һәм абруйлы бурыс атҡара. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына нигеҙ һала.
1933 йылда йырсының «Башҡорт совет музыкаһын тыуҙырыу өсөн көрәштә» тигән брошюраһы баҫылып сыға. Үҙ ғүмерендә уның бер нисә йөҙ башҡорт халыҡ йырын яҙып алғанлығы билдәле.
Ғәзиз Әлмөхәмәтов үҙенең репертуарын рус һәм Европа классик операларынан ариялар, итальян йырҙары иҫәбенә байытыуға ла бик ҙур тырышлыҡ һалған. Иғтибар итегеҙ: был арияларҙы ул, һүҙҙәрен үҙе тәржемә итеп, башҡорт телендә башҡарған. Шулар иҫәбендә – Ленский (П. Чайковскийҙың «Евгений Онегин» операһы), Дубровский ариялары (Э. Направниктың «Дубровский» операһы), герцог йыры (Дж. Вердиҙың «Риголетто» операһы), йәнә А. Бородиндың Алыҫтағы ил ярҙары» («Для берегов отчизны дальней») романсы һ.б. Үкенескә ҡаршы, был яҙмаларҙың береһе лә һаҡланмаған булһа кәрәк. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтан һуң сит ил операларынан арияларҙы әлегә бер генә йырсының да беҙҙең үҙ телебеҙҙә йырларға кәрәклеге иҫенә лә инеп сыҡҡаны юҡ. Ғәзиз Әлмөхәмәтов нигеҙ таштарын һалышҡан милли опера һәм балет театрыбыҙ бар. Әммә унда ла сит ил классикаһын һис юғында һирәкләп кенә булһа ла башҡорт телендә ҡуйыу зарурлығын аңларға теләмәйҙәр. Ә бит быны беҙ бөйөк йырсыбыҙҙың мөҡәддәс бер аманаты итеп ҡарарға бурыслыбыҙ.
Ғәзиз Әлмөхәмәтов биографияһында асыҡланып бөтмәгән бер мәсьәлә бар. Был уның юғары музыкаль уҡыу йортонда белем алыу-алмау мәсьәләһе. Ғәҙәттә уның хаҡындағы мәҡәләләрҙә был хаҡта йә бер һүҙ ҙә әйтелмәй, йә йырсыны үҙ алдына белем алған тип кенә әйтеп үтәләр. Әммә, тарих фәндәре кандидаты С.Б. Сәйфуллин яҙғанса, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың аҙмы-күпме ваҡыт эсендә Мәскәү дәүләт консерваторияһының талибы булғанлығын ситләтеп булһа ла раҫлай торған документ табылған .«Аҙмы-күпме ваҡыт» тип әйтәм, сөнки ул ваҡытта инде бөтөн йәне-тәне менеән ижади эшмәкәрлеккә сумған киң таныулы йырсы һәм композиторҙың йылдар буйы консерватория бүлмәләрендә ултырырлыҡ форсаты ла, түҙемлеге лә, мөмкинлеге лә етмәгәндер, моғайын.

1938 йылдың 10 июлендә бер юлы 38 кешене аталар - 15 минут һайын бер кеше. Ә ниндәй шәхестәр! Шул иҫәптән Вәлиулла Мортазин-Иманский, Мәкәрим Мәһәҙиев, Дауыт Юлтый, Булат Ишемғолов…
Тик 1957 йылда, Сталиндың шәхес культы фаш ителгәс кенә, уның исеме халҡыбыҙға кире әйләнеп ҡайтты.
1937 йылғы золом, бик күп аҫыл заттарыбыҙ менән бергә, Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың да ғүмерен ҡыйып үтте. Шул йылдың 12 декабрендә уны ҡулға алалар. Уға, һеҙ халыҡ йырҙарын йырлап, милли мөнәсәбәттәрҙе киҫкенләштерәһегеҙ, тип ғәйеп тағалар. Һорау алыу протоколында йырсыға: «Һеҙ үҙегеҙҙе ғәйепле һанайһығыҙмы?» — тигән һорау бирелгән. «Эйе, мин халыҡ йырҙарын — «Урал», «Сибай», «Буранбай»ҙы йырланым», — тип яуаплаған. «Алдан суд тикшереүе шуны асыҡланы - Әлмөхәмәтов 1918 йылда советҡа ҡаршы һәм вәлидовсы төркөмдә әүҙем ҡатнашыусы була, совет власын емертеү эштәре алып бара, ә артабан Башҡорт АССР-ы территорияһында хәрәкәт иткән һәм совет власын бәреп төшөрөүҙе, ҡоралды восстание, ВКП(б) һәм совет хөкүмәте ағзаларына ҡаршы террор акттары яһау юлы менән пантюркистик дәүләт төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуйған буржуаз-милләтсе баш күтәреүсе һәм террористик ойошма составына ингән…
РСФСР Енәйәт Кодексының 58-2, 58-8,  58-11, 58-13 статьялары буйынса ҡаралған енәйәттәр ҡылыуҙа ғәйепле тип иҫәпләп, РСФСР ЖПК–ның 319 һәм 320 статьяларын ҡулланма итеп алып, СССР Юғары суды Хәрби коллегияһының Күсмә сессияһы Әлмөхәмәтов Ғәзиз Сәлих улын, бөтә мөлкәтен конфискациялап, иң юғары язаға – атырға хөкөм итте…»Шуға өҫтәп, уның ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова-Латипованың һүҙҙәрен  дә килтереп үтәйек: «Атайым ике тапҡыр Стәрлетамаҡта Зә ки Вәлиди хөкүмәте  алдында концерт биргән булған, шуны ғәйеп итеп, милләтсе м өһөрөн  баҫҡандар».
Шағир Мөслим Маратҡа төрмәлә Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың һуңғы көндәрендә бергә ултырырға тура килә. Уның иҫтәлектәрен уҡып, бөйөк йырсыбыҙҙың бөйөк рухлы шәхес булғанлығына ла инанабыҙ. «Ул рәшәткә артындағы тотҡондар — тотош ил буйынса барған енәйәт ҡорбандары алдында йырланы. Һуңғы һулышына тиклем үҙенең ғәйрәтле ҡоралын — йырын ташламаны. «Урал»ды, «Буранбай»ҙы йырлағанда, аҙағынаса тамамлап ҡуйһын өсөн, башҡа тотҡондар надзирателдәрҙе тотҡарлап, уның эргәһенә ебәрмәй торҙо».
Уны һуңғы тапҡыр камеранан алып сығып киткәндә тотош камера йырлап оҙатып ҡала. Йырсы, композитор, йәмәғәт эшмәкәре Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов үҙе ижад итешкән «Эшсе» операһындағы Ниғмәт арияһын йырлай, ә ҡалған тотҡондар уға ҡушыла:

Тауҙар ватып таштар аҡтарғанда
Булырһығыҙ минең күңелемдә,
Эштән арып ялдар иткән саҡта,
Булырһығыҙ минең телемдә.
Ай, диңгеҙгә барып төшә икән
Боролоп-боролоп аҡкан ағым һыу,

Рәхәт ине бергә торған саҡтар,
Айырылышыуы бигерәк яманһыу!
Эйе, башҡорт йырын еңер көс донъяла юҡ һәм булмаҫ та! . 1938 йылдың 10 июлендә бер юлы 38 кешене аталар - 15 минут һайын бер кеше. Ә ниндәй шәхестәр! Шул иҫәптән Вәлиулла Мортазин-Иманский, Мәкәрим Мәһәҙиев, Дауыт Юлтый, Булат Ишемғолов…
Тик 1957 йылда, Сталиндың шәхес культы фаш ителгәс кенә, уның исеме халҡыбыҙға кире әйләнеп ҡайтты .
1938 йылдың 10 июлендә Ғәзиз Әлмөхәмәтов үлем язаһына хөкөм ителә һәм ул ҡарар шул уҡ көндө ғәмәлгә ашырыла.
Ә ярты йыл үтеүгә, 14 декабрҙә, Өфөлә ҙур тантана менән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры асыла. Милли театрҙың тәүге спектаклендә Ғәзиз Әлмөхәмәтов хәстәрлеге менән ойошторолған башҡорт студияһын тамамлап ҡайтҡан йырсылар сығыш яһай. Уның исеме үҙе үк моңло йыр, яҡты йондоҙ булып, туған халҡының күңел түрендә йәшәй.

Ғәзиз Әлмөхәмәтов Ташкент ҡалаһында булғанда, татар йырсылары һәм музыканттары гастролгә килә. Сәлих Сәйҙәшев, Кәрим Тинчурин, Рабиға Борнашева- лар була улар араһында. Улар менән бергә Әзербайжан ға бара. Гастроль менән барған саҡта Әзербайжан опера һәм балет театрының музыкаль спектаклендә ҡатнаша һәм башҡорт операһын ижад итеү хыялы менән яна 2 9 башлай. Ш улай итеп, "Сания" операһы идеяһы тыуа. У ға Татарстан композиторҙары Солтан Ғәбәши менән Василий Виноградов ярҙам итә. 1925 йылда Ҡазан ҡ а лаһында "Сания" операһы ҡуйыла. Был опера беренсе башҡорт-татар операһы булып иҫәпләнә. Бынан һуң "Эшсе" операһы тыуа. Опера Мәжит Ғафуриҙың эшселәр темаһына яҙылған "Эшсе" поэмаһы нигеҙендә эшләнә (опера 1 9 3 0 йылда Мәскәүҙә күрһәтелә). 1929 йылда Ғәзиз Әлмөхәмәтов Өфөгә ҡайта һәм йыр йыйыу һәм өйрәнеү эшенә тотона. У ға беренсе булып "Башҡорт АССР-ының халы ҡ артисы" тигән исем бирелә. Ғәзиз Әлмөхәмәтов тыуған яҡтарына ҡайтҡас,ең һыҙғанып, илһамланып эшләй. Мәскәү консервато рияһы эргәһендә башҡорт студияһы астырыуҙы юллай башлай. У л һәләтле балалар эҙләп районДарға сыға. Фольклор йыйыу буйынса ойошторған экспедицияла рында бер юлы һәләттәр ҙә эҙләй. Баныу Вәлиева, Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Зәйтүнә Илбаева, Ульяна Калинина- Сыртланова, Әсмә Шайморатова, Мәрйәм Ғабдрахмано ва, Мөслимә М усина, Сәлих Хөснийәров, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Рәүеф Мортазиндар — барыһы ла ул тап ҡан таланттар. Ғәзиз Әлмөхәмәтов халы ҡ йырҙары, классик романс тар, ариялар башҡарыу менән бергә үҙе көйҙәр яҙа, ижад менән шөғөлләнә. "Маяковскийҙың үлеменә ҡара та" тигән үҙенсәлекле музыкаль әҫәр яҙа. "Шомло ел", "Сайҡалалар кәмәләр", "Йырҙар яҙам ", "Ағиҙел буйҙа рында", "Көтөүсе" тигән бик тә үҙенсәлекле йырҙары билдәле. 19 3 3 йылда халыҡты музыкаль яҡтан тәрбиәләү проблемаһы буйынса китап нәшер итә. "Башҡорт совет музыкаһын тыуҙырыу өсөн көрәш юлында" тигән бро шюраһы бик тиҙ танылыу ала. Башҡорт телендә яҙылған бик төплө хеҙмәт була был. Йырсы халыҡты музыкаль яҡтан тәрбиәләү, уларға зауыҡлы әҫәрҙәр тыңлатыу хыялы менән йәшәй. 1936 йылда, йөк машинаһын сәхнә итеп йыһазлап, форте пиано ултыртып, ике ай буйы республика ауылдарында концерт менән йөрөйҙәр. Халы ҡ өсөн күрелмәгән был музыка ҡоралында уйнаусы пианистка

Вера Иванев- 30 екая, ғәжәйеп оҫта мандолинасы татар егете Исмәғил Билалов, бейеүсе Заһиҙә Бәхтийәрова, йырсы Диана 11 урмөхәмәтова һәм администратор Шәүкәт Мәсәғүтов була был концерт бригадаһында. Пластинкалары һәм I елдән телгә күскән даны аша халы ҡ Ғәзиз Әлмөхәмә- гоиты яҡшы белә. Ш уға ла концерттарҙа халы ҡ иҫ кит мәле күп була. Ҙур ауылдарҙа сығыш яһаған саҡта тирә-яҡтарҙан да йыйылышып киләләр. Ғәзиз Әлмөхәмәтов туған халҡының йырҙарын бик иратып һәм ҙур ихласлыҡ менән башҡара. "Урал", Буранбай", "Сибай", "Таш туғай", "Зөлхизә", "Шәүрә- |сәй" йырҙары репертуарынан төшмәй. Киң диапазонлы, иҫ китмәле моңло тенор менән башҡара ул халы ҡ йырҙарын. Үҙе ижад иткән йырҙар ҙа халы ҡ йырҙары Һымаҡ уҡ тиҙ арала отоп алына, күңелгә ятышлы була. Ул киләсәк өсөн йәшәй: опера театры репертуарын әҙерләргә тотона, Солтан Ғәбәшигә, Александр Ключа ре иҡа яңы операларға заказ бирә, итальян операларын тәржемә итә, үҙе "Ы нйыҡай менән Ю лдыҡай" тигән опера яҙа башлай. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың иң ҙур хыялы — опера театры псыу була. Әммә театр асылыр алдынан ғына Ғәзиз : >лмөхәмәтовты, халы ҡ йырсыһын, "халы ҡ дошманы" тип ҡулға алалар. 1 9 3 8 йылда аталар. Ғәзиз Әлмөхәмәтов башҡорт халҡының, һис ш ик һеҙ, талантлы улы. Бөгөнгө көнгә тиклем яратылып башҡарылған "Сайҡалалар кәмәләр" йыры, опералары буйынса ғына ла уның ни тиклем сағыу композитор булғанлығын күҙалларға мөмкин. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 1 00 тулыу уңайы менән Мораптал ауылында музей асыла, ә Республика музыка-тәрбиә мәктәп-гимназияһына уның исеме бире лә. Х алы ҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың Ғәзиз Әлмө хәмәтов исемендәге республика конкурстары үткәрелә һәм лауреаттар билдәләнелә.

**Йомғаҡлау. Башҡортостандың мәҙәниәте һәм сәнғәте үҫешенә**
Ғ. Әлмөхәмәтов индергән өлөшҒәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов- йырсы, композитор, йәмәғәт эшмәкәре, БАССР-ҙың халыҡ артисы (1929). Ғәзиз Сәлих улының яҙмышы 15 минут эсендә тиерлек хәл ителеп, шунда уҡ тормошҡа ашырылған ваҡытта уға бары 42 йәш була. Әммә ул ошо ҡыҫҡа ғүмере эсендә лә Башҡортостандың мәҙәниәте һәм сәнғәте үҫешенә ҙур өлөш индереп өлгөрә, йәмәғәт эшмәкәре булараҡ танылыу яулай. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың йыраусылыҡ сәнғәте оҙон башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыуҙың үрнәгенә әйләнә, мин үҙ туған халҡымдан йырларға өйрәндем, тип яуап бирәсәк ул "Ҡайҙа уҡының, кемдән өйрәндең?" тигән һорауға.
Әлмөхәмәтов тәбиғи һәләте, моңло үҙенсәлекле тауышы, музыкаль һәм ишетеү һәләте менән айырылып тора. Етмәһә, көслө ихтыярлы, тырыш була, үҙен йәлләмәйенсә эшләй белә. Башҡорт операһын булдырыу, башҡорт халыҡ йырҙарын таратыу, Мәскәү консерваторияһы эргәһендә башҡорт милли студияһы булдырыу уның ижади һәм ихтимағи-сәйәси тормошоноң маҡсатына әүерелә. Был "беренселәр" мәле, Башҡортостан профессиональ сәнғәтенә нигеҙ һалынған ваҡыт була. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың аяныслы үлеменән һуң оҙаҡ йылдар уның исеме бөтөнләй телгә алынмай. 1957 йылда аҡлана. Тик бынан һуң да йәш быуын башҡорт музыка мәҙәниәтенең иң сағыу вәкиле тураһында белмәй үҫә. Композитор, ғәжәйеп йырсы ошо онотолоуҙан бөртөкләп-бөртөкләп йыйылған мәғлүмәттәр аша арабыҙға "ҡайта". 1968 йылдың ноябрендә башҡорт радиоһы уның тураһында ҙур тапшырыу эшләй (авторҙары Г. Сабитов, Р. Хәйруллин). 1973 йылда музыка белгесе Л. Атанованың "Жизнь как песня" тигән китабы баҫыла. Музыка бегесе Ю. Иҫәнбәт әҙерләгән "Газиз Альмухаметов и Султан Габяши в Казани" тигән китапты (Өфө, "Каданс", 1995) телгә алырға кәрәк. Тарихсы С. Сәйфуллин яңы мәҡәләләр яҙа. Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арнап, "Башҡортостан" киностудияһы архив материалдары, замандаштарының хәтирәләре буйынса "Йыр булып ҡайтырмын" (1994) тигән документаль фильм төшөрә. Унда Әлмөхәмәтовтың әҫәрҙәре, үҙенең тауышы яңғырай. 2008 йылда М. Иҙрисова "Газиз Альмухаметов: Статьи. Воспоминания. Документы" тигән китап сығара. Унда тәүгә Әлмөхәмәтовтың музыкаль-әҙәби мираҫына анализ яһала. Ғәзиз Әлмөхәмәтовты композитор булараҡ билдәләгән әҫәрҙәре араһында иң әһәмиәтлеһе "Шомло ел" башҡорт профессиональ музыка сәнғәте тарихында беренсе йыр-баллада була. Уның яҙылыу мәле асыҡланмаған. Башҡортостанға ҡайтҡан арала Ғәзиз Беренсе донъя һәм граждандар һуғышына "эйәреп" килгән емереклек, аслыҡ һәм ауырыуҙарҙан халыҡтың миктәгәнен күреп йөрөй. Шул рәүешле шағирә С. Биксурина һүҙҙәренә матәм йыры барлыҡҡа килә. Фортепиано өсөн көйҙө Василий Виноградов ижад итә. Әҫәрҙең нигеҙендә - бер-береһе менән бәйле ике үҙәк образ: башҡорт фольклорында төп урындарҙы алып торған Урал менән тыуған ил ireклеге өсөн көрәштә шәһит булған герой образы.
1937 йылдың 12 декабрендә йырсы һәм композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов ҡулға алына. Ете оҙон айҙы төрмәлә уҙғара. Ул үҙен иреккә сығарырҙар тип ышана, йырлауын дауам итә, тамағына һалҡын теймәһен өсөн туғандарынан төрмәгә йылы шарф алып килеүҙәрен һорай. Әммә 15 минутлыҡ ҡына суд ултырышы тамамланғас та ҡарар тормошҡа ашырыла. Төп ғәйебе, йәнәһе, "үҙенең концерт программаларына контрреволюцион халыҡ йырҙарын индереүе". Ғәзиз судҡа

тиклем дә йырлай. Һуңынан был хәлгә шаһит булыусылар композиторҙың ятатҡан йырҙарын - "Урал" һәм "Буранбай"ҙы йырлауын һөйләйәсәк...
Ғ. Әлмөхәмәтов менән бер көндө НКВД органдары билдәле сәйәси һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәрен, яуаплы вазифалар биләгән шәхестәрҙе ата. Уларҙың ҡайһы берҙәренең генә исемдәрен хәтергә алып китәйек: Риза Әбүбәкеров, Әхмәт Иҫәнсурин, Булат Ишемғолов, Ғөбәйҙулла Дәүләтшин (яҙыусылар), Башҡорт академия драма театрының художество етәксеһе Мәкәрим Мәһәҙиев, ошо уҡ театрҙың артисы Вәлиулла Мортазин, Яҙыусылар берлеге рәйесе Дауыт Юлтый - барыһы 44 кеше. Ғәзиз Әлмөхәмәтов был исемлектә Дәүләт концерт берекмәһе артисы булараҡ теркәлгән була. 1938 йылдың 10 июлендә башҡорт мәҙәниәте, фәне, шулай уҡ халыҡ хужалығы элитаһы юҡҡа сығарыла.

**Ҡулланылған әҙәбиәт:**

1. Атанова Л.П. Жизнь как песня: Творческий портрет Газиза Альмухаметова. Уфа, 1973.
2. Атанова Л.П. Күрһәтелгән хеҙмәт.
3. Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр // Төҙ.: Р. Бикбаев. Өфө, 1994.
4. Атанова Л.П. Күрһәтелгән хеҙмәт.
5. Фәйзи Йәүҙәт. Виртуоз мандолинсы // Шәйехзада Бабич тураһында иҫтәлектәр. Өфө, 1994.
6. Газиз Альмухаметов и Султан Габаши в Казани. Уфа: «Каданс», 1995.
7. Давыдова Э.М. Йыр булып ҡайтырмын // Башҡортостан. 1995